

***Ғиниәт ҠУНАФИН,***
***филология фәндәре докторы,***
***профессор,***
***Халыҡ-ара Төркиәт***
***академияһы академигы***

# «Ватандаш» журналы — рухиәт таянысы

Ғаиләбеҙҙә башҡорт телендә донъя күргән республика газета-журналдарының бөтәһенә лә яҙылыу традицияға әүерелгән. Әна бит эстондар милли матбуғатҡа финанс сығымдарын ҡаплау, уны һаҡлап ҡалдырыу һәм үҫтереү өсөн һәр баҫманы икешәр, хатта өсәр дана алдыралар һәм уларға субъектив йә объектив сәбәптәр арҡаһында яҙылырлыҡ мөмкинлектәре булмаған ҡан-ҡәрҙәштәренә бер Эстония сиктәрендә генә түгел, бәлки Рәсәй, БДБ илдәрендә лә таратырға тырышалар. Үҙемдең усаҡҡа көл тартыу өсөн әйтмәйем: заманында, СССР тарҡалып, ижтимағи тормоштоң бөтә тармаҡтарында ла, шул иҫәптән почта хеҙмәте өлкәһендә лә тырым-тыраҡайлыҡ, тәртипһеҙлек хөкөм һөргән йылдарҙа, беҙҙең ғаиләнең дә өсәр дана «Йәшлек», «Башҡортостан» газеталарына, «Ағиҙел» журналына яҙылып, дүрт-биш йыл буйына Ҡурған өлкәһе Сафакүл районындағы ҡан-ҡәрҙәштәребеҙгә ебәреп ятҡан сағы булды. Ике йыл буйына был баҫмаларға 1996 йылда сыға башлаған «Ватандаш» журналы ла өҫтәлде.

Ошо мәлдән алып, бына инде ун биш йыл «Ватандаш»тың тоғро уҡыусыларының береһе булып ҡалам. Йыл да яҙылам, кинәнеп уҡыйым, ҡулдан килгәнсә яҙышам. Уның лауреаты булыу шатлығын да татырға яҙҙы.

Арттырып ебәрмәйемдер,тип уйлайым: «Ватандаш» журналы XX—XXI быуаттар сиктәрендә Башҡортостандың ижтимағи-мәҙәни тормошона үҙе бер яңы рухи һулыш, яңы энергия алып килгән баҫма булды һәм булып ҡала. Барлыҡҡа килеүенең тәүге көндәренән үк ул үҙен исеменә есеме тап килгән яңы типтағы энциклопедик йөкмәткеле баҫма итеп танытты, уҡыусылар араһында ҙур популярлыҡ яулай башланы. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә эстәлеге менән дә, форма-структураһы йәһәтенән дә ижтимағи-сәйәси, фәнни-популяр һәм нәфис журнал булыуын тулыһынса раҫлап өлгөрҙө ул. XX быуат башында мәшһүр мәғрифәтсе-ғалим, әҙип һәм теолог Р.Фәхретдинов етәкләгән «Шура» журналы нисек күптәрҙең ҡул осонда ғына йөрөр, өҫтәле өҫтөндә генә ятыр баҫмаһы булһа, «Ватандаш» журналы ла яңы замандың заңына яуап биргән, Башҡорт-

остан халыҡтарының рухи-мәҙәни, интеллектуаль донъяһын байытыуға ғәйәт ҙур өлөш индергән киң масштаблы, демократик тәбиғәтле баҫма булып танылды. Ни генә тимә, унда төрлө-төрлө милләт вәкилдәре булған сәйәсмән дә, дәүләт йә йәмәғәт эшмәкәре лә, ғалим йә әҙип тә, уҡытыусы йә табип та, эшсе йә крәҫтиән дә республикабыҙҙың дәүләт телдәрендә лә (башҡорт, рус), халыҡ-ара тел булараҡ танылған инглиз телендә лә үҙ уй-фекерҙәре менән уртаҡлаша һәм үҙҙәренә кәрәкле бай мәғлүмәт ала алды һәм ала. Быны ундағы рубрикаларҙың күплеге лә, мәғәнәүи киңлеге лә асыҡ дәлилләп тора: сәйәсәт, иҡтисад, дәүләт һәм халыҡ, тарих, мәғариф, әҙәбиәт, мәҙәниәт һәм сәнғәт, әҙәбиәт ғилеме, әҙәби мираҫ, халыҡ ижады, арҙаҡлы шәхестәр, дин, йәш ватандаш, библиография, «Ватандаш» ҡумтаһы һ.б.

Шулай ҙа журналдың иң матур, иң изге, мин әйтер инем, бик урынлы һәм законлы миссияһы булып Башҡортостан Республикаһына нигеҙ һалыусы халыҡтың тарихын, социаль-иҡтисади, сәйәси, рухи-мәҙәни тормошон, философик, әхлаҡи-этик, эстетик һәм башҡа ижтимағи ҡараштары системаһын яҡтыртыу, улар менән мөмкин тиклем донъя йәмәғәтселеген таныштырыу һәм башҡорт халҡының төрлө яҡлап үҫеүенә, айырыуса интеллектуаль-мәҙәни, рухи үҫешенә булышлыҡ итеү йүнәлешендәге эше тора. Бөгөнгө көндә «Ватандаш» журналы республикабыҙҙа ла, унан ситтә лә башҡорттар өсөн милләтте милләт итеп тотоусы, йәшәтеүсе, уның булмышын билдәләүсе рухтың бер ныҡлы, өмөтлө таянысы, «алтын бағанаһы» булып тора.

Дөрөҫ, һуңғы осорҙа журналда әҙәби әҫәрҙәр баҫтырыуға әүәҫлек көсәйҙе, тигәнерәк фекерҙәр күренә башланы. Был мәсьәлә хаҡында тәрәнгә китеп һүҙ йөрөтөп тормаҫтан, һәр төрлө баҫмаға, һәр ижад емешенә иң ғәҙел баһаны биреүсе шулай ҙа киң ҡатлам уҡыусыларҙыр тигән уй менән бынан туғыҙ — ун йыл самаһы элек тыуған Ғафури районымда уҡытыусыларҙың август кәңәшмәһендә ҡатнашҡан сағымда миңә тапшырылған бер яҙыу хаҡында ғына әйтмәксемен. Татар телендә яҙылған ине ул. Уны Үтәк урта мәктәбендә эшләгән, республикабыҙ һәм районыбыҙ тарихы, башҡорт, татар халыҡтарының рухи тормошо менән ныҡ ҡыҙыҡһынған Р.Ә.Ракаев тигән иптәш үҙенең һәм коллегаларының исеменән яҙған булып сыҡты. Яҙыуҙы, эстәлеген ҡыҫҡартыбыраҡ, нисек бар шулай, үҙ стилен һаҡлаған килеш биреп китәйек: «Ватандаш» журналы үтә лә академик баҫма. Сит халыҡтарға һәм илдәргә башҡорт халҡын танытыу өсөн был, бәлки, шулай кәрәктер. Әммә ләкин киңерәк ҡатлам өсөн журналдың әҙәбиәт менән нығыраҡ бәйле булыуы ла мөһим. Ҡыҙыҡлы шәхестәр менән таныштырыу кеүек мәҡәләләргә күберәк урын бирелһен ине. Башҡорт әҙәби мираҫы хаҡында аҙыраҡ яҙыла... Әҙәби мираҫтың үҙен тәржемә менән биреү, аңлатмалы мәҡәләләр бик кәрәк (Ҡазандағы «Мираҫ» журналы һымаҡ)...»

Был яҙма ниндәйҙер аңлатмаға мохтаж түгел кеүек. Һөйөндөргәне шул: «Ватандаш»ты татар туғандар ҙа уҡый, уға үҙ мөнәсәбәтен белдерә, уны тағы ла яҡшыраҡ, уҡымлыраҡ итеү тураһында уйлана, ҡыҫҡаһы, уның яҙмышына битараф түгел. Ә журнал коллективы, миңә ҡалһа, киң ҡатлам уҡыусыларҙың уй-теләктәренә яуап бирергә, заман менән бергә атларға, алға ҡарап эш итергә тырыша, эҙләнә. «Ватандаш»ыбыҙ киләсәктә лә халҡыбыҙҙың, республикабыҙҙың бер рухи-мәҙәни таянысы, «алтын бағанаһы» булып йәшәүен дауам итер тигән өмөттәбеҙ. Амин, шулай була күрһен.